*Аҫылгужа БАҺУМАНОВ*

# Сәхнәбеҙ һәм әҙәбиәтебеҙ күрке



Кешене оҙагыраҡ та, күберәк тә белгән һайын, хатта дуҫы ла икәнһең, уның тураһында яҙыуы ҡыйыныраҡ, минеңсә. Яҡшы беләм тип, яҡшы килтереп сығара алмауҙан ҡурҡыла, шикелле. Бигерәк тә дуҫың ил күләмендә олуғ шәхес булһа... Бына шулай арҙаҡлы үә шөһрәтле затыбыҙ Илшат ағай Йомағолов тураһында яҙырға, ниһайәт, йөрьәт ителде, ләкин Илшат Йомағолов һынлы ҙур талант эйәһенең сәхнә сәнғәте өлкәһендәге ҡаҙаныштары һәм башҡорт драматургияһы үҫешенә индергән берәгәйле, тос өлөшө хаҡында барыһын да әйтеп бөтөрә алмаҫымды беләм. Илшат Йомағолов тигән оло донъяны асыу берәүҙең генә ҡулынан килә торған эш түгелдер. Шуға күрә һүҙем нигеҙҙә был шәхесте үҙемдең нисек күреүем-аңлауым, уның ижади эшмәкәрлегенә мөнәсәбәтем менән бәйлерәк барыр.

Теләстән ҙурыраҡ ауыл, Баймаҡтан ҙурыраҡ ҡала күргәнем юҡ саҡта, иллә-мәгәр гәзит үә журналдарҙы йотлоғоп уҡыған, радионы йотлоғоп тыңлаған йылдарҙа «таныштым» мин Илшат Йомағолов менән. Тауышын ишеттем, һүрәттәрен күрҙем. Уның тураһында яҙылғандарҙы уҡыным. Шул замандан уға ҡарата ҡыҙыҡһыныуым көсәйгәндән-көсәйҙе. Урта мәктәпте тамамлағандан һуң бер йыл үткәс кенә үҙен сәхнәлә «тере» килеш ҡарау бәхетенә өлгәштем. 1964 йылдың көҙө. Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә»һен ҡуйҙылар. Юҡ, унда Аҡйегет ролен Йомағолов башҡарҙы тип әйтергә телем бармай — тиҫтерем-йәштәшем Аҡйегеттең үҙен күрҙем; ул кисергәндәрҙе башкөлләй кисерҙем.

Сәхнә менән ғәләмәт ҡыҙыҡһынған, үҙе лә пьеса әтмәләп ҡараған һәм ауыл клубтарында өс-дүрт спектаклдә уйнап булашҡан үҫмерҙе таң-хайран ҡалдырған артистарҙың икенсеһе ине Илшат Йомағолов. Тәүгеһе — Арыҫлан Мөбәрәков. Баймаҡтағы Ишмырҙа ауылында Өфөнән килеп ниндәйҙер спектакль ҡуйғайнылар, шунда һушты китәргәйне ул бөйөк затыбыҙ... Әлбиттә, үҙ ғүмеремдә бик күп артистарҙың уйынына һоҡландым, ижадтарынан тәрән эстетик ләззәт кисерҙем, рухи йәһәттән илһам үә ҡеүәт алдым, ләкин дә үҫмерҙең тәүге һөйөүе — тәүге инде, ни тиһәң дә. Мөбәрәков менән Йомағоловты үҙҙәренең беренсе мөхәббәте һанаусылар, мөхәббәттәренә аҙаҡҡаса тоғро ҡалыусылар мин генә түгеллеге аңлашылалыр. Театр һәм кино актеры Илшат Йомағоловтың талантына, юғары сәнғәтенә меңдәр ғашиҡ булды. Ярты быуат буйы ул — сәхнәбеҙ күрке — халҡыбыҙҙың күңел түрен биләп-биҙәп-яҡтыртып торҙо, үҙе лә милләтебеҙҙең күңел күркенә, оло ҡаҙанышына әүерелде.

Артистың ниндәй-ниндәй ролдәрҙә нисек-нисек уйнағанын һанап тормайыҡ артабан — быныһы сәхнә сәнғәте белгестәренә ҡулайлыраҡтыр. Шуны ғына айырым билдәләп китәйек: актер Илшат Йомағолов — башҡорт театрының сағыу бер бите, сағыу күренеше. Театр тарихында шулай булып ҡала.



10-2001.p65 195 02.11.01, 15:36

Ошо урында әүәлерәк булған бер хәлде иҫкә төшөрөп, моңайып ҡуйыл-ды әле...

Илшат ағай менән Өфәнән ситтә әҙәм араһында йөрөп ятабыҙ. Уны мин кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә «Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы» тип атайым — үҙемсә бик тә ҙурлайым, йәнәһе. Аулағыраҡ ҡалғайныҡ, һалмаһынмы был хәбәрҙе: «Аҫылғужа, етәр — алдашма! Рәсәйҙең дә, Башҡортостандың да халыҡ артисы түгел бит мин!» Ғәжәпләнеүҙән саҡ ултыра төшмәнем. Бәй-бәй, ысынмы? Ысын икән шул...

Ғөмүмән, ижад кешеләренә беҙҙең республика хакимдарының мөнәсәбәтенә аптырарлыҡ ул. Бер ҡараһаң, һәйбәт кенә кеүек — хөрмәт итәләр, баһалайҙар, исем-атын, бүләк-мүләген дә биреп торалар; икенсе ҡараһаң, әпкәләйҙәр баһаһын, бохайырҙар һүҙен алдын ҡуялар ҙа ысын талантҡа ҡуҡыш күрһәтәләр, хатта ситләтәләр. Хәйер, Илшат Йомағолов ниндәйҙер яһалма һәм рәсмиләштерелгән исем-атҡа мохтаж булманы, әле лә иҫе китеп бармай. Ул, сәхнәләр тултырып, халҡы өсөн уйнаны, халҡы өсөн илһамланып ижад итте. Түрәләр-хакимдар түрендә булыр өсөн түгел. Бына ошо сифатын өнәмәнеләр ҙә инде Йомағоловтоң. Тура һүҙлелеген (үҙһүҙлелек хаҡында тимәйем), фекерле булғанлығын, «айт!» тигәнгә «тайт!» тип тормағанын өнәмәнеләр. Ә бит Илшат ағайҙың ошо кешелек сифаттары мәҙәниәтебеҙ тальянлаштырылған, сәхнәбеҙ ғәлиәләштерелгән осорға (әле ҡулланылған терминдарҙы арҙаҡлы Әсғәт Мирзаһитов индергәйне, уларҙы тырнаҡтар эсенә алыуҙы кәрәк һанаманым. — А.Б.), башҡорт милли театрының милли йөҙөн юғалта барыуға ҡырҡа ҡаршы тороу ине.

Тап ана шул сифаттары арҡаһында Илшат Йомағолов — башҡорттоң күҙ терәп торған артистарының береһе — республикабыҙҙың төп театрынан китергә мәжбүр ителде. Заманында мөһабәт Шәүрә Мортазина һөйөклө Башҡортостанынан һөрөлөүгә мәжбүр ителгән кеүек. Ҡайтмаңы ҡабат иленә Муса Мортазиндың ғәзиз ҡыҙы Шәүрәбеҙ. Ситтә башы ҡаңғырған Илшат ағайыбыҙ ҡайтты үҙ иленә, ләкин үҙенең төп сәхнәһендә барыбер тора алманы. Тағы китте. Был юлы Стәрлетамаҡҡа. Унда Башҡорт дәүләт академия драма театры менән тиң торорлоҡ, уны хатта ҡайһылыр позициялар буйынса уҙып та киткән театр барлыҡҡа килтереүгә хәл иткес төп өлөштө индерҙе. (Әхәт Хөсәйенов, Гөлдәр Ильясова, Кинйәбикә Исламғолова һымаҡ Стәрлетамаҡҡа ситтән барған күренекле заттарыбыҙ ошо урында мине дөрөҫ аңлар тип ышанам. — А.Б.).

Театр һынлы театр барлыҡҡа килтереүҙе телгә алғас, Илшат ағай Йомағоловтың педагогик эшмәкәрлегенә лә бер аҙ туҡталып китәйек. Сәхнәлә үҙенең актерлыҡ талантын тулайым асҡан шәхестең йәштәр менән тәжрибә уртаҡлашыуынан башлана быңдай эшмәкәрлек ғәҙәттә. Ошонан ары китмәҫкә лә мөмкин — һис яҙыҡ түгел. Илшат Йомағолов иһә ары китте, юғарыраҡ күтәрелде. Биш йыл самаһы Өфө сәнғәт училищеһында курстар алып барҙы. Рәмзиә Хисамова һымаҡ байтаҡ таланттарға киң юл асты. 1982—1990 йылдарҙа Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы булды Йомағолов. Бында ла талантлы бик күп шәкерттәргә ҡанат ҡуйыуы менән арҙаҡлы мөғәллим булды. 1991 йылдан Стәрлетамаҡта Башҡорт мәҙәниәте техникумында курстар алып бара... Театр педагогикаһы өлкәһендәге эшмәкәрлегендә академик булған Илшат Йомағолов, әлбиттә, рәсми рәүештә профессор танытмаһы йөрөтмәй — бындайын дәрәжәләр биреү өсөн дә яһалма кәртәләр күп ҡуйылған беҙҙең илдә. Хәйер, хикмәт һинә кем тарафынандыр тағылған атшәрифтә түгел дәһә. Хикмәт — эштең сифатында, һөҙөмтәһендә. Был йәһәттән педагог Илшат Хәлил улы Йомағоловҡа хатта уның дошмандары ла ҡаршы һүҙ әйтә алмаҫына иманым камил. Үҙ уҡыусыларында һәләт-талант осмотон күрә, шуны үҫтерә белә, булдыҡһыҙҙарҙы илаҡтан үткәрә лә ала — «йөнтәҫ ҡул» принцибы уға ҡағылмай.

Әйткәндәй, ҡасандыр Илшат Йомағолов та сәнғәт училищеһы һәм Мәскәүҙә дәүләт сәнғәт институты (ГИТИС) студенты булған бит әле. Уны берәү ҙә әлеге уҡыу йорттарына етәкләп килтермәгән, уҡытыусыларына «бүләк» тамыҙмаған хәҙерге замандағы һымаҡ. Педагогтар ҙа бөгөнгө Илшат Йомағоловтың үҙе шикелле талапсан да, ҡаты ла булған. Бер саҡ



10-2001.p65 196 02.11.01, 15:36

училище талиптары арҙаҡлы Арыҫлан Мөбәрәков алдында имтихан тота икән. Арыҫландай ҡараш аҫтында тубығың да дерелдәмәй булмаҫ, иллә-мәгәр сәхнәне һайлағанһың икән — бирешмә! Имтихан тамамланғас, әйткән Мөбәрәков: «Шәп уйнаның, Илшат ҡустым! Ныу, ошо уйыныңды ҡабатлай алһаң, һин — гений!» Ә бит студент Йомағоловтың уңышһыҙлыҡҡа осраған саҡтары ла булмаған түгел. Мәҫәлән, «Ер ожмахы» тигән бер пьесала, урыҫса әйтһәк, провалился. Уңышһыҙлыҡҡа тарыған студентта ла киләсәк уңыштарҙы шәйләй-күрә белеү — ысын педагогтарға ғына хас сифат. Йомағоловтың Хажи Бохарский, Вәли Ғәлимов, Рифғәт Фәйзи, Крашенинников, Б.Бибиков һымаҡ остаздары — ана шундайҙарҙан. Илшат Хәлил улы үҙе лә шундай остаздарҙан.

Артист һәм педагог Йомағолов менән яҡындан танышып, хатта дуҫлашып та китеүебеҙ 1986 йылдың июнендә булды. Шуғаса осрашҡан да, күрешкән дә бар ине. Етмәһә, беҙҙең ятаҡҡа ла килгеләп йөрөнө — курсташым Зәкинәнең һеңлеһе Рәмзиә Хисамоваға өйләнгәйне. Бер ваҡыт райондан яңылыш бирелгән телеграмма арҡаһында Илшат ағай менән Рәмзиәне Ҡазандан Өфөгә самолетта осорға ла мәжбүр иткәйнем — бының өсөн ғәйепһеҙ көйөмә оялып та йөрөгәйнем уларҙан... 1986 йылдың июнендә «Яҡтыкүл» санаторийында беҙҙе — исеме сыҡҡан журналисты, шағирҙы һәм драматург сифатында ла танылған артисты әҙәбиәт яҡынайтты, йәмғиәткә ҡарашыбыҙ уртаҡлығы дуҫлаштырҙы. Хәбәр ыңғайы ғына билдәләп китәйем: ирҙәр гәҙәттә үҙ-ара әңгәмәһен сәйәсәттән башлай ҙа ҡатын-ҡыҙ тирәһендә алып барып ослай, йәки киреһенсә; беҙ иһә бына ун биш йыл буйы уның менән ижад тураһында, теге йәки был ижадсы хаҡында гәп ҡорабыҙ башлыса, ҡатын-ҡыҙ һәм сәйәсәткә, нишләптер, ҡағылып бармайбыҙ. Әңгәмәбеҙ ярлыланмай шулай ҙа.

Һикһәненсе йылдар аҙағында — туҡһанынсы йылдар башында яҙыусылар халыҡ араһына йыш сыға торғайны. Президиумдарҙа ултырып, алҡыш күреп ҡайтыр өсөн түгел, бәлки кешеләр менән ҡәҙимгесә аралашырға, халыҡтың тын алышын тыңларға йөрөр инек. Беҙҙән, әлбиттә, башҡорт әҙәбиәтенең торошо, киләсәге, яҙыусыларҙың хәл-әхүәле хаҡында һорашалар... Башҡорт драматургияһына характеристика биргәндә мин, гәҙәттә, уны СССР кимәлендә юғары ҡуя торғайным, Мостай Кәрим, Азат Абдуллин һымаҡ исем-шәрифтәре советтар илендә киң билдәле әҙиптәр рәтенә Илшат Йомағоловты ла мендерә инем. Дәлилем башлыса шуға ҡайтып ҡала: әйтәйек, Мостай ағайҙың «Ай тотолған төндө»һендә шәхес азатлығы беренсе планға сығарылһа, Илшат ағайҙың «Нәркәс»ендә иһә ил азатлығы төп идея итеп алға ҡуйыла, тиер инем. Ошо хәбәремде оҡшатмаусылар, ошо хәбәремде ошаҡлаусылар тураһында һөйләп тә тормайыҡ...

Ярар, минең фән кандидаты йәки докторы тигән ат-дәрәжәм юҡ, шундай рәсми танытмалары булғандарҙың фекерҙәрен сағыштырып ҡарайыҡ. «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»ның 6-сы томында былай тип яҙыла: «Ай тотолған төндө» әҫәренең үҙәгендә бәхетһеҙ мөхәббәт, трагик яҙмышлы ғашиҡтар темаһы, бер-береһен өҙөлөп һөйгән Зөбәржәт һәм Аҡйегет... һәм тол ҡалған, иренең ҡустыһы Аҡйегеткә ҡатын булырға тейешле Шәфәҡ трагедияһы тора... Иң оло, иң үҙәк трагик образ — ырыу башлығы, ил әсәһе Тәңкәбикә... Дәрүиш трагедияһы ла фәһемле... «Ай тотолған төндө» — характерҙар трагедияһы... Әҫәр Мостай Кәрим ижадында ла, күп милләтле совет драматик әҙәбиәтендә лә яңы бер сифат үҙгәреше, айырым бер һикереш (авторҙар сифат үҙгәрешенең яңы, юғарыраҡ кимәленә өлгәшеү тураһында һүҙ алып барырға теләгән, күрәһең. — А.Б.) булды... Мостай Кәрим трагедиялары тап бына шундай кеше яҙмыштары аша дөйөм халыҡ яҙмышын кәүҙәләндереү маҡсатын ҡуйыу һәм был маҡсатты ҙур әҙәби оҫталыҡ менән тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә киң яңғыраш алдылар ҙа инде» (күрһәтелгән китап, 1996, 156-158-се биттәрҙән алынмалар).

Был фекерҙәргә ҡушылабыҙ һәм төп һығымтаны ла хуплайбыҙ. Хәҙер «Нәркәс»кә киләйек.

«Нәркәс» әҫәренең үҙәгендә төп трагик конфликт — мөхәббәт менән намыҫ, тыуған ил менән барасаҡ ер (ҡайҙа барасаҡ ер? Термин аңлайышһыҙ. — А.Б.) араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы асыуға ҡайтып ҡала... Кеше



10-2001.p65 197 02.11.01, 15:36

өсөн унының шәхси бәхетенән дә, донъяһының бөтә рәхәтлектәренән дә ҙурыраҡ, ҡәҙерлерәк нәмә бар — ул кеше намыҫы, ил һәм халыҡ алдындағы бөйөк бурыс. Намыҫ менән бурыс Нәркәсте лә тыуған төйәгенә ҡайтара» (күрһәтелгән китаптың 158-159-сы биттәренән алынмалар).

Күренеүенсә, әҫәргә нарыҡ бик һай, өҫтән-мөҫтән генә бирелгән, төп тема һәм идея асылмай. Фекерҙәр буталсыҡ. Мәҫәлән, ил һәм халыҡ алдындағы бурысы нимәлә һуң Нәркәстең?..Әҫәр геройҙары Нәркәс, Тимерхан, Сынтимер һәм башҡаларҙың шәхси фажиғәләре намыҫ менән генә сикләнмәй ҙәһә, бурысҡа, тоғролоҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырылмай бит... Шәхси фажиғәләрҙең сәбәбе гәҙәттә төптә — этнос үҫешендәге үҙенсәлектәрҙә ята. «Нәркәс»тә беҙ башҡорт халҡының милләт булараҡ формалашыу осороноң бер этабын күрәбеҙ. Ул этапта, этнология фәне өйрәтеүенсә, этногенездың акматик фазаһында, йәмғиәттәге ут шәхестәр (пассионарийҙар) үҙҙәрен шәхес сифатын да раҫларға, шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең этник коллективының («Нәркәс»тә — ырыуҙарҙың. — А.Б.) өҫтөнлөгөнә өлгәшергә ынтыла. Шәхес сифатында үҙендә раҫларға ынтылыу индивидуализмдың үтә көсәйеүенә килтерә, һәм шәхестәрҙәге артыҡ энергия эске конфликттарҙы хәл итеүгә йүнәлтелә һәм шул арҡала һүндерелә башлай. «Нәркәс»тә башҡорттар сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшмәй, ә үҙ-ара низағтар менән булыша, былар иһә фажиғәләрһеҙ үтмәй һис ҡасан. Намыҫ, мөхәббәт, бурыс — аң үә тойғо категориялары; тимәк, Ер йөҙөндәге беҙгә тиклем һәм әле йәшәгән, беҙҙән һуң йәшәйәсәк барса халыҡтар, барлыҡ кешеләр өсөн уртаҡ нәмәләр. Халыҡтарҙың билдәле бер дәүер арауығында йәшәйештәре, ғүмер һөрөүҙәре иһә оҡшаш та, уртаҡ та була алмай, әгәр һәр этностың үҫешенә (этногенезына) хас оҡшаш, уртаҡ закондылыҡтарҙы иҫәпкә алмағанда.

Дөйөмләштереп әйткәндә, «Ай тотолған төндө» лә шәхси фажиғәләр индивидуаль планда, «Нәркәс»тә ырыу, ил һәм этнос яҫылыҡтарында кәүҙәләндерелә. Айырма шунда ғына: берәһен түбән, икенсеһен юғарыраҡ баһалау мөмкин түгел, кәрәкмәй ҙә. Иң мөһиме — М.Кәримдең дә, И.Йомағоловтың да тарихи материал нигеҙендә юғары художестволы кимәлдә ҙур оҫталыҡ менән яңы һүҙ әйтеүе, башҡорт әҙәбиәтен яңы бейеклеккә күтәреүе.

Үрҙә әйтелгәндәр һөҙөмтәһендә Илшат Йомағоловтоң драматургияһын эталон бейеклегенә мендерергә теләмәйем. Һәр шағирҙың да насар шиғырҙары булған һымаҡ, һәр драматургтың да йомшаҡ пьесаһы була. Илшат ағайҙың «Ебәк ҡороҡ» тигән әҫәрен, мәҫәлән, уңышһыҙҙар рәтенә индерәм. Шулай ҙа дөйөм алғанда Йомағолов драматургияла ла үҙенең талантын аса һәм гәмәлгә ашыра алды. «Семәрле тәхет» тигән трагедияһын, әйтәйек, «Нәркәс» шикелле үк ҡайнар һулыш һәм оҫталыҡ менән яҙылған» тип, «Башҡорт әҙәбиәте тарихы» (6-сы том, 186-сы бит) хаҡлы баһалай. Быға шулай тип әйтер инем: яҙыу оҫталығы ғына түгел, сюжет ҡороу, материал һайлау, идея-тематика ҡуйыу, образдарҙы характер кимәленә күтәреү кеүек әҙәби оҫталыҡҡа бәйле байтаҡ нәмәләрҙә лә маһирлығын күрһәтте Илшат Йомағолов, әҙәбиәтебеҙҙә ныҡлы урын алды, унын күркенә әүерелде. Үҙенең 70 йәшен дә яҙыусы «Сәсәндәр» исемле трагедияһы менән ҡаршылай. (Беренсе вариантын ҡулъяҙмала уҡығайным, бәктиһәң, яңы вариантын яҙған икән, — сәхнәләрҙән ҡарарға яҙһын!) Яңы йыйынтыҡ менән дә ҡаршылай. Был китабында Илшат ағайҙың әкиәт-пьесалары һәм комедиялары тупланған, трагедияларҙан «Семәрле тәхет» кенә индерелгән. Иң тәүҙә унын үҙешмәкәр драма коллективтары өсөн ҡиммәтле әсбап-сығанаҡ икәнлеген билдәләйек. Хәйер, профессиональ театрҙар репертуарында ла тотороҡло урын алырлыҡ әҫәрҙәр бар бында. Йәнә шуныһы: әлеге китапҡа ингән әҫәрҙәр драматургтың ижади эволюцияһын, мөмкинлектәрен, ижади офоҡтарын байҡарға-күҙалларға, әҙәбиәтебеҙҙең драма жанрын байытыуға индергән өлөшөн баһаларға ярҙам итәсәк. Драматургтың «Һайланма әҫәрҙәр» йыйынтығын донъя күрһәтеү — киләсәк эше, әлбиттә.



10-2001.p65 198 02.11.01, 15:36